# Шәжәрәлә
# минең
# яҙмышым

**(*шәжәрә байрамы*)**

**Төҙөнө: Башҡорт теле һәм**
**әҙәбиәте уҡытыусыһы**
**Нурисламова И.Р.**

**Маҡсат:** Нәҫелдәр ебен, быуындар сылбырын барлау,  атайҙарға, тыуған яҡҡа һөйөү, халҡыбыҙҙың үткәненә һәм хәҙергеһенә ихтирам уятыу, ғорурлыҡ хисе тәрбиәләү.

**Йыһазлау:** ”Шәжәрәлә минең яҙмышым”,
“Шәжәрә… Тарих төпкөлөнән киләсәккә  тәҙрә”,
“Илен белмәгән – белекһеҙ, нәҫелен белмәгән – намыҫһыҙ” тигән һүҙҙәр яҙылған плакаттар, шәжәрәләр күргәҙмәһе.

Зал матур итеп  биҙәлгән. Сәхнәлә стенаға төрлө яҙыулы плакаттар эленгән:
“Шәжәрәлә минең яҙмышым”,
“Шәжәрә… Тарих төпкөлөнән киләсәккә  тәҙрә”,
“Илен белмәгән – белекһеҙ, нәҫелен белмәгән – намыҫһыҙ”.

Күңелле музыка яңғырый. Сәхнәгә ике алып барыусы сыға.



**1.а.б**   Шәжәрә - ул байрам ғына түгел,
Ул ҡурайҙай рухтың үҫеше,
Мең ғазаптар аша ҡан тартыуы,
Уттар аша ғүмер киҫеше.

**2.а.б** .Шәжәрә - ул йәшәү тантанаһы,
Һулар һауа, тупраҡ, ғәзиз ер,
Ул тамырым буйлап аҡҡан ал ҡан,
Боронғо ла, йәш тә, хәҙерге.

**1.а.б** Шәжәрә - ул моңло « Буранбай » ҙай,
Иләүеңде һаҡлар ҡоралдай,
Буш тормаған бала бишегендәй,
Арҡа терәр мәғрүр Уралдай.

**2.а. б.** Шәжәрә - ул бөйөк, изге йортоң.
Уға тейеш һин бер ҡайтырға.
Унда һине туғаныңа Ер ҙә,
Йән дә, ҡан да тейеш тартырға!

**1 а. б.** Тыуған ерем, ғәзиз ерем
Тәүге аяҡ баҫҡан ерем.
Намыҫыңа тап төшөрмәй
Йәшә тип әйткән ерем.

**2 а.б.** Бала саҡтың хәтирәһен
Һаклаусы – һин, тыуған ерем.
Бар белгәнең тик – изгелек,
Рәхмәт һиңә, тыуған ерем.

**1 а.б.** Һаумыһығыҙ. Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар, килгән ҡунаҡтар.

**2 а.б.** Бөгөн беҙҙә ҙур байрам. Шәжәрә байрамы. Һеҙҙе ошо байрам менән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

**1 а. б.** Тыуған ауылым, илһам шишмәһе һин,
Һине һағынып ҡайта һәр кем.
Ҙур һөйөнөс менән бөгөн
Байрамға килгән халҡым.
**2 а.б.** “Ер, әсә” һүҙҙәре,
Ата- бабам эҙен юллап,
Сумамын мин тарихтарға,
Ырыу ҡаны тарта беҙҙе
Төрлө тарафтарҙан.
**1 а.б.** Уралып та аҡкан оло йылға
Һүтәйек әле тарих йомғағын.

**1 уҡыусы “Шәжәрә” шиғырын яттан һөйләй.(Ғәлиев Ринат 6-сы класс)**

**1 а.б.** Шәжәрә - ул ырыу тарихы. Борон башҡорттар ырыу- ҡәбиләләргә бүленеп йәшәгән. һәр ырыуҙың үҙ исеме булган. Халыҡ элек – электән үҙ ырыуының тарихын яҙып ҡалдыра барған. Шәжәрәлә бөтә ир- ат исемдәре күрһәтелгән.

**2 а.б.** Шәжәрә ғәрәп телендә “ағас” тигән һүҙ. Беҙҙең олатайҙарыбыҙ үҙ нәҫелен, ата- бабаларҙың исемдәрен ағас рәүешендә тармаҡландырып яҙа барған. Ни өсөн ағас?

**1 а.б.** Сөнки ағас – һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштереүсе билдә булған. Халыҡтың тормошон сағылдырған.

**2 а.б.** Тамыры- үткәнебеҙ, олоно- бөгөнгөбеҙ, тармаҡ- ботаҡтары – киләсәгебеҙ.

**1.а.б.** Һәр ағастың тамыры булған кеүек, беҙҙең дә, беҙҙең ауылыбыҙҙың да тамырҙары бар. Тамыр ул – беҙҙең кисәге көнөбөҙ. Ул беҙҙең тарихыбыҙ. Әйҙәгеҙ әле ауыл тарихына күҙ һалайыҡ.

**Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта Еремйә ауылының хөрмәтле кешеһе, оҙаҡ йылдар мәктәптә эшләп, лайыҡлы ялға киткән Әминева Кәүсәриә апайыбыҙ.**
**Хәҙер һүҙҙе уға бирәбеҙ.Рәхим итегеҙ.**



**1 а.б.** Һуңғы йылдарҙа нәҫел шәжәрәңде төҙөү буйынса ҙур эштәр алып барыла. Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте мотлаҡ талап ителә.

**2 а.б.** Нәҫелде 7 быуынға тиклем барлау хәҙер ғәҙәти хәл, ә ҡайһы берәүҙәр 10-12 быуынға тиклем дә үҙ нәҫелдәрен беләләр.

**1 а.б.** Кем булған олатайың,
Олатайыңдың атаһы?
Уларҙан тыш нәҫелеңдә,
Йә, кемдәр булған тағы?

**2 а.б.** Ниндәй һөнәр белгәндәр,
Ниндәй кейем кейгәндәр?
Был яҡҡа, был ауылға,
Улар ҡайҙан килгәндәр?

**1 а.б.** Хәҙер уҡыусылар үҙ шәжәрәләре менән таныштырып алырҙар.
**Уҡыусылар (һәр кластан берәр уҡыусы) үҙ шәжәрәләре менән таныштыралар.**

Сәхнәг үҙ шәжәрәһе менән 5-се класс уҡыусыһы Әхмәтвәлиева Әлфинә сыға. Рәхим итегеҙ!

**Башҡорт халыҡ бейеүе (8-се класс ҡыҙҙары)**



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 6-сы класс уҡыусыһы Кәләмова Гөлдәр сыға. Рәхим итегеҙ!



**“Туғандарҙың ҡәҙерен бел” йыры башҡарыла.**



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 7-се класс уҡыусыһы Ғиндуллина Гүзәл сыға. Рәхим итегеҙ!



**2.а.б.** Шәжәрә  байрамдары - сикһеҙ әһәмиәтле сараларҙың береһе. Улар үткәненә күҙ һалырға, тарихты аңларға, белергә ярҙам итә. Әле шәжәрә байрамдары Башҡортостандың  төрлө төбәктәрендә үтеп, матур бер йола итеп тергеҙелә.

Был аңлашыла ла, сөнки күптән билдәле бер хәҡиҡәт бар – тарихҡа күҙ һал да, киләсәгеңде күҙалла. Был күркәм сараның төп ҡаҙанышы – ата-бабаларыбыҙға, нәҫелебеҙгә ҙур хөрмәт күрһәтеү ул.

**1а.б.** Эйе, ауылымдың ғорурлығы булған, һоҡланғыс кешеләре ифрат күп. Тәү тапҡыр ошо ерҙә ауаҙ һалған, тәпәй баҫкан һәм яҙмышын туған тупрағы менән бәйләгән, ауыл хужалығының төрлө тармаҡтарында тырышып эшләгән яҡташтарыбыҙ бихисап.

**2 а.б.** Беҙ улар менән ғорурланабыҙ һәм арабыҙҙа шундай шәхестәр булғанда, нәҫел шәжәрәбеҙҙә матур эҙҙәр ҡалыуына ҡыуанабыҙ.

**1 а.б.** Тыуған ауыл, тыуған яҡ. Ниндәй изге, илаһи көскә эйә төшөнсәләр. Яҙмыш елдәре төрлөбөҙҙө төрлө яҡтарға илткәндә лә,.

һағынып, йыраҡ араларҙы яҡын итеп ашҡынып ҡайтырбыҙ һиңә, тыуған яҡ!

**“Тыуған яҡ” йыр (Усманов Нияз башҡара)**



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 8-се класс уҡыусыһы Ситдиҡов Хәлил сыға. Рәхим итегеҙ!



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 8-се класс уҡыусыһы Зартдинова Регина сыға. Рәхим итегеҙ!



**Башҡорт бейеүе (8-се класс ҡыҙҙары)**



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 9-сы класс уҡыусыһы Миңнеғолов Рүзил сыға. Рәхим итегеҙ!



Сәхнәгә үҙ шәжәрәһе менән 10-сы класс уҡыусыһы Әхмәтова Юлиә сыға. Рәхим итегеҙ!



**“Тәҙрәләр” йыры башҡарыла.  (Хәлиева Алһыу башҡара)**



**2 а.б.** Шәжәрә - ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә,
Күп яҙҙырһаң, шул тәҙрәнән атыр йәҙрә.
Ал бер үрнәк – бал ҡорттары төҙөй кәрәҙ,
Һин дә ятма; ҡор ояңды. Үр шәжәрә!

***1.а.б*** ***:***Ырыу ағасым һин, эй шәжәрәм!
Һин үҫкәндә донъя йәшәрә.
Күкрәк киреп олон тарбайтҡанда,
Күкте терәп ерҙә һин торғанда,
Йәшәргә лә әле йәшәргә.



